# аяҡ аҫтында

# БӘЛӘ аяҡ аҫты

*...Көслө шартлау тауышы алыҫтарға китеп ҡаҡсыны ла шаңдау булып яңғыраны. Әйтерһең дә иң татлы йоҡо мәлен, таң һыҙылып атҡанын көткән ул.*

*Тимер юлының ике яғында ла уртаға өҙөлгән поезд вагондары ауып ята, пассажирҙарҙың ярҙам һорап һөрәнләгәне, ыңғырашҡаны ишетелә...*

*Оло Тәләк һәләкәте ине был. Кешеләргә, ҡазаға осраған барса пассажирҙарға ярҙам кәрәк. Бына шул саҡта фажиғәгә тарыусыларға һис кисекмәҫтән ярҙам күрһәтеү өсөн ашығыс ярҙам үҙәге кәрәк булыуы тағы бер тапҡыр асыҡланды. Дөрөҫ, ул көндәрҙә һәләкәткә осрағандарға бөтә Башҡортостан халҡы ярҙамға килде. Әммә тәүге сәғәттәрҙә ойошҡанлыҡ, медикаменттар, тәжрибәле белгестәр етмәүе бәҡәлгә һуҡты. Ә күпме кешенең ғүмерен һаҡлап ҡалырға мөмкин булыр ине.*

*Бындай ярҙамды кем күрһәтә ала һуң? Башҡортостанда ошондай ойошмалар бармы? Ул ҡайҙа урынлашҡан? Ошо һәм башҡа һорауҙарға яуап табыу маҡсаты менән беҙ исеме нисектер ят, әммә нимәһе менәндер үҙенә ылыҡтырып торған Һәләкәттәр медицинаһы үҙәгенә юл тоттоҡ. Әңгәмәсебеҙ — үҙәктең баш табибы К.Х.Шәкүров.*



*Камел Хужа улы Шәкүров 1949 йылда Ҡырғыҙ ССР-ы Ош өлкәһенең Ташкүмер ҡалаһында тыуған. Хеҙмәт юлын Салауат ҡалаһында башлай. 1976 йылда Өфө дәүләт медицина институтын тамамлай һәм Ҡурған өлкәһенә эшкә ебәрелә. Унда "Озеро Горькое" шифаханаһында баш табип урынбаҫары булып эшләй. 1980 йылда Өфөгә ҡайта һәм Башҡорт АССР-ы Эске эштәр министрлығы поликлиникаһы начальнигы урынбаҫары, Республика онкология диспансерында баш табип урынбаҫары, Һаулыҡ һаҡлау министрлығы эргәһендәге лицензия-аккредитация комиссияһы рәйесе урынбаҫары вазифаларын атҡара. 2000 йылдан — Башҡортостан Республикаһының Һәләкәттәр медицинаһы үҙәгенең баш табибы.*

— Башҡортостан — индустриаль республика, — тип башланы һүҙен Һәләкәттәр медицинаһы үҙәгенең баш табибы Камел Шәкүров. — Башҡалабыҙ Өфөлә, Стәрлетамаҡ, Салауат ҡалаларында тиҫтәләгән техноген һәләкәт сығанағы булған заводтар бар. Әлбиттә, тейешле ҡағиҙәләрҙе дөрөҫ үтәгәндә һәр төрлө фажиғәләргә юл ҡуймаҫҡа ла мөмкин. Әммә улар, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, булып тора...

Техноген йүнәлештәге һәләкәт икән, унда кешеләр ағыуланыуы, яныуы мөмкин. Тәбиғәт тә кешеләрҙең уяулығын йыш һынай: әле унда, әле бында янғын сыға, ҡайҙалыр



08-2001.p65 170 30.10.01, 11:38
Black

ҡала-ауылды һыу баҫа, транспортҡа бәйле фажиғәләр ҙә байтаҡ.

Бына ошо мәлдә һәләкәттәр медицинаһы үҙәге ярҙамға килә лә инде. Ҡаланың бер ситендә урынлашһаҡ та республиканың бөтә ойошмалары менән дә бәйләнеш тейешле кимәлдә ҡуйылған. Әле үҙәктә 20 кеше эшләй. Беҙҙең үҙәк белгестәре һәләкәт осрағында ашығыс ярҙамды ойоштороусылар ул. Бында етерлек күләмдә ашығыс ярҙам күрһәтеү саралары, дарыуҙар тупланған, тәжрибәле табиптар ҙа бар. Улар барыһы ла хәрби врачтар, күбеһе подполковник, майор дәрәжәһендә.

Ҡыҫҡаһы, үҙәктә эшләүселәр хәрби хәлдә йәшәй, кәрәк саҡта тәүлек әйләнәһенә эшләргә мәжбүр. Әйтәйек, өс йыл элек Бөрйән районында пассажирҙар тейәлгән автобус әйләнеп, 30 кеше бәләгә тарығас, беҙҙең белгестәр төн уртаһында юлға сыҡты һәм урында кәрәкле ярҙам күрһәтте. Яралы кешене ҡайҙалыр алып барып еткергәнсе байтаҡ ваҡыт үтеүе мөмкин. Беҙҙең табиптар иһә хәрби тормош шарттарына оҡшаш хәлдә лә кәрәкле ярҙамды күрһәтә ала, дарыуҙар ҙа етерлек.

Мәҫәлән, 1999 йылда Инйәр йылғаһының боҙҙарын аҡтарғанда вертолет ҡолап төштө һәм 9 кеше ҡазаға тарыны. Үҙәк белгестәре уларға иң беренсе булып ярҙамға килде.

Былтыр республика райондарында туляремия эпидемияһы булып алды. Үҙәк белгестәре санитария-эпидемия тикшеренеүҙәре хеҙмәткәрҙәре менән берлектә урындағы халыҡҡа ҙур ярҙам күрһәтте.

Өфө халҡының маҙаһына тейгән фенол фажиғәһе лә яҙ һайын ҡабатланып тора. Фенол — һыуҙы, һыу халыҡты ағыуламаһын өсөн ҡулдан килгәнсә тырышабыҙ.

Чечняла яраланған хәрбиҙәргә ярҙам күрһәтеү йәһәтенән дә үҙәк байтаҡ эштәр атҡарҙы. Унда ике хәрби госпиталь асып, кәрәкле дарыуҙар, инструменттар, аппараттар менән тәьмин иттек.

Быйыл яҙ Ҡырмыҫҡалыла дөйөм ятаҡта булған фажиғәлә 24 кеше зыян күрҙе. Беҙҙең үҙәктең Ҡырмыҫҡалылағы вәкилдәре уларға иң беренсе булып ярҙамға килде һәм тәүге ашығыс сараларҙы күрҙе. Тап ошо йылдамлыҡ бик күп кешеләрҙең, айырыуса балаларҙың ғүмерен һаҡлап ҡалырға ярҙам итте, был фажиғәлә 1 генә кеше һәләк булды.

**— Камел Хужиевич, үҙәктең ҡасан һәм нисек ойошторолоуы хаҡында ла әйтеп китһәгеҙ ине...**

— Бындай үҙәкте ойоштороуҙа иң элек Оло Тәләк фажиғәһе этәргес көс булды. Ошондай һәләкәттәргә осрағанда ярҙам күрһәтеү йәһәтенән Башҡортостан Республикаһы Министрҙар Кабинетының "Ғәҙәттән тыш хәлдәрҙе иҫкәртеү һәм уның эҙемтәләрен бөтөрөүҙең берҙәм дәүләт системаһының Башҡортостан төбәге подсистемаһы тураһында" ҡарары, Башҡортостан Республикаһының "Халыҡты һәм төбәкте тәбиғәттән һәм техноген характерҙағы ғәҙәттән тыш хәлдәрҙән һаҡлау тураһында" Законы, Рәсәйҙең "Һаҡлау" һәләкәт медицинаһы үҙәгенең тәҡдимдәре нигеҙендә Башҡортостан Республикаһының Һәләкәттәр медицинаһы үҙәге төҙөлдө һәм алты йыл инде төрлө һәләкәт эҙемтәләрен бөтөрөүҙә ҡатнаша. Бындай үҙәктәр Рәсәйҙең 17 төбәгендә генә юҡ. Беҙҙең Өфөләге үҙәктән тыш Башҡортостандың 11 ҡалаһында ошондай медицина үҙәктәре булдырылған, улар менән көн һайын, сәғәт һайын тигәндәй, хәбәрләшеп торабыҙ. Шуныһы ҡыуаныслы, беҙҙәге кеүек бар йәһәттән юғары кимәлдә йыһазландырылған үҙәктәр бик аҙ.

**— Һәләкәттәр медицинаһы үҙәге иң элек кемгә буйһона: Һаулыҡ һаҡлау министрлығынамы, әллә Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығынамы?**

— Беҙ уларҙың икеһе менән дә ҡулға-ҡул тотоноп эшләйбеҙ. Үҙәк



08-2001.p65 171 30.10.01, 11:38
Black

урынлашҡан бина кәрәк саҡта штаб хеҙмәтен үтәй. Көтөлмәгән хәлдәр килеп тыуған осраҡта ҙур залда ашығыс кәңәшмәләр үткәрелә. Бында бер нисә ял итеү, йоҡо бүлмәләре бар. Теге йәки был урындағы хәл тураһында хәбәр бик тиҙ үҙәктәге пультҡа килә. Ә унан диспетчер тейешле урынға хәбәр итә.

Үҙәктең төп хеҙмәте — һәләкәткә осраған кешеләргә ашығыс ярҙамды һәм уның эҙемтәләрен бөтөрөүҙә ҡатнашыусыларҙы ойоштороу, тейешле урынға йүнәлтеү. Үҙәктең оператив төркөмө шунда уҡ ғәҙәттән тыш хәл булған ергә юллана. Пультта ултырған хеҙмәткәр (диспетчер) артабан ошо хәл тураһында мәғлүмәт туплай, уны тейешле органдарға еткерә. Был иһә ҡазаға тарыған халыҡҡа медицина-санитария ярҙамы күрһәтеүҙе планлы рәүештә башҡарырға мөмкинлек бирә. Дауалау, эвакуация, гигиена буйынса, эпидемияға ҡаршы эштәрҙе тәьмин итеүҙә лә Үҙәк хеҙмәткәрҙәре ҙур ярҙам күрһәтә.

**— Беҙ йыш ҡына замана ауырлыҡтарына һылтанып, үҙебеҙҙе аҡларға тырышабыҙ...**

— Бәлә һорап килмәй. Ул һинең аҡсаң булғанды, дарыуҙар һатып алғаныңды ла көтөп тормай. Шуға күрә һәр төрлө иҡтисади ҡыйынлыҡтарға ҡарамайынса, беҙҙең Һәләкәттәр медицинаһы үҙәгендә төрлө ғәҙәттән тыш хәлдәр осрағанда кәрәкле бөтә нәмә лә бар.

Башҡортостан Республикаһы хөкүмәте үҙәкте элемтә, транспорт саралары, медицина аппараттары, дарыуҙар менән тулыһынса тәьмин итеүҙә ҙур ярҙам күрһәтте. Ғәҙәттән тыш хәлдәргә юл ҡуймау һәм улар булған осраҡта уның эҙемтәләрен бөтөрөүҙе тәьмин итеү өсөн бында үҙәкләштерелгән фондтарҙан, финанс өлкәһендәге башҡа сығанаҡтарҙан бүленгән сығымдар иҫәбенә резерв фонды булдырылған. Был фонд дәүләт бюджетына алынмай. Үҙәккә, Башҡортостан Республикаһы закондарына ярашлы, баш врач-директор етәкселек итә, уны Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры тәғәйенләй. Шуны ла әйтеп китергә кәрәк, Һаулыҡ һаҡлау министры Р.М.Хәсәнов үҙәккә ҙур ярҙам күрһәтә.

Һәләкәттәр медицинаһы үҙәге Башҡортостан өсөн үтә мөһим. Техноген, экологик һәм тәбиғәттәге көтөлмәгән хәлдәр арҡаһында килеп тыуған фажиғәләр һәр кемдән йылдам, аныҡ һәм оҫта эш итеүҙе талап итә.

Һәләкәт ҡайҙа ғына булмаһын, беҙ һис кисекмәҫтән ярҙам итергә тейешбеҙ. Үҙәктә эшләгән табиптарҙың медицина ярҙамы күрһәтеүҙән тыш психологик йәһәттән дә белемгә эйә булыуы мөһим. Башҡорт дәүләт медицина университетында махсус һәләкәттәр медицинаһы кафедраһы асылды. Университет студенттары беҙҙең үҙәктәге уҡыу кластарында белем ала.

Ҡыҫҡаһы, Башҡортостанда һәр төрлө һәләкәт осрағында ярҙам ҡулы һуҙырлыҡ, ҡотҡарыу эштәрен ашығыс рәүештә ойоштороrлоҡ, кәрәкле йыһаздар, дарыуҙар менән үҙ ваҡытында тәьмин итерлек Һәләкәттәр медицинаһы үҙәге бар.

*З.Нариманова әңгәмәләште.*





08-2001.p65 172 30.10.01, 11:38
Black